ULUSLARARASI TÜRK LEHÇE ARAŞTIRMALARI DERGİSİ (TÜRKLAD), 2. CİLT, 1. SAYI, 2018, 329 – 335. s., TÜRKİYE

# ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ФОЛЬКЛОРЫНДА КОСМОГОНИЯ

(Автор яҙып алған экспедиция материалдары буйынса)

*Gölnar YULDIBAYEVA*[*]


**Аннотация**

Һуңғы йылдарҙа уҙғарылған фольклор экспедицияларында йыйылған халыҡ ижады үрнәктәре араһында иң йыш осраған Ҡояш, Ай, йондоҙҙар тураһында мәғлүмәттәр. Был соляр образдар хаҡында төрлө мәғлүмәттәрҙең таралыуына беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙҙың донъяға булған ҡараштары сәбәпселер. Борон-борондан кешеләрҙе әйләнә-тирәләге тереклектең ҡайҙан һәм ни рәүешле килеп сығыуы тураһында һорауҙар ҡыҙыҡһындырған. Күк йөҙө, донъя бары тик күҙ күреме менән генә ҡабул ителгән, ә аңлата алмаған урындар, реаль ысынбарлыҡ кешенең фантазияһы, мифтар менән тулыландырылып, йәнләндерелгән.

Хәҙерге көндә уҙғарылған экспедиция материалдарын өйрәнгәндә, халыҡ хәтерендә бар йыһанға яҡтылыҡ, йәшәү бүләк итеүсе Ҡояш культына ҡағылышлы, бигерәк тә уның ҡалҡыуына бәйле мифтар, үҙенсәлекле ышаныуҙар, им-томдар, шулай уҡ, магик көскә эйә булыусы Айға, уның тулыуына, тыуыуына бәйле мәғлүмәттәр, тыйыуҙар, күк биҙәге йондоҙҙар хаҡында ла ҡыҙыҡлы материалдар тотороҡло һаҡлана. Кешеләр һәр ваҡыт уларҙың күктәге торошон, хәрәкәтен күҙәткән. Был күҙәтеүҙәр халыҡ ижадының йолаларында, ғөрөф-ғәҙәттәрендә лә һынланыш тапҡан.


**Асҡыс һүҙҙәр:** Башҡорт фольклоры, Космогония, Экспедиция, Миф, Йола, Ҡояш, Ай, Йондоҙҙар.

# GÜNÜMÜZ BAŞKURT FOLKLORUNDA KOZMOGONİ

(Yazarın derlediği materyallerden hareketle)


**Özet**

Son yıllarda düzenlenen folklor derleme gezilerinde toplanan halk edebiyatı örnekleri arasında en sık karşılaşılanları Güneş, Ay, yıldızlar hakkındaki bilgilerdir. Bu güneşle ilgili imgeler hakkında çeşitli bilgilerin yayılmasında bizim eski atalarımızın dünyaya olan bakışları etkili olmuştur. Çok eskiden beri insanları, etraflarındaki canlılığın ne zaman ve ne şekilde ortaya çıktığıyla ilgili sorular meraklandırmıştır. Gökyüzü, dünya yalnızca gözün gördüğü şekliyle kabul edilmiş, fakat anlatılamayan yerler, gerçeklik kişinin hayal dünyası, mitolojilerle süslenip canlandırılmıştır.

Günümüzde yürütülen derleme gezisi materyalleri incelendiğinde, halk hafızasında bütün cihana parlaklık, hayat hediye eden güneş kültüne ait, özellikle de onun doğmasına bağlı mitler, özellikli inanışlar, efsunlar; yine büyüsel bir güce sahip olan aya, onun dolunay hâline, doğmasına bağlı bilgiler, yasaklar ile gökyüzünün süsü olan yıldızlar hakkındaki ilginç materyaller sağlam bir şekilde korunmaktadır. İnsanlar, her zaman onların gökteki duruşunu, hareketlerini gözlemlemişlerdir. Bu gözlemler, halkın geleneklerinde, örf âdetlerinde de yansımasını bulmuştur.


---

[*] Dr. Öğr. Üyesi, Rusya Bilimler Akademisi, Ufa Bilim Merkezi Tarih, Dil ve Edebiyat Enstitüsü, Halk Bilimi Bölümü, Ufa-BAŞKURDİSTAN/RUSYA, el-mek: nargul1976@list.ru

ORCİD ID: https://orcid.org/0000-0002-4973-2267

**Anahtar Sözcükler:** Başkurt Folkloru, Kozmogoni, Derleme Gezisi, Mit, Gelenek, Güneş, Ay, Yıldızlar.

## COSMOGONY IN THE BASHKIR FOLKLORE

(Based on materials from recent expeditions)

**Abstract**

At the present stage, the expedition's folklore materials often contain heavenly bodies - the Sun, the Moon, the stars. The distribution of this type of images was associated with the oldest representations of our ancestors. Since ancient times, people have often been troubled by the question: "Where and from what did it all come about?". The firmament was mastered only by visual perception. The lack of real knowledge was filled with imagination, myths. The mysterious heavenly world has always been perceived as something sacred, inaccessible and has been the object of people's worship.

Based on the materials of the expeditions of recent years, myths have been preserved in Bashkir folklore, explaining the origin of the Sun, the donor of light and the life of the entire universe, interesting knowledge about sunrise, sunset, moon, night light, related to the moon's profit and loss, eclipse. Stories about the appearance of the stars are also preserved in the people. People always watched the movement, the state of heavenly bodies, they were always surrounded by mystery. The veneration of heavenly bodies is also observed in various beliefs, prohibitions, parallels are reflected in everyday customs and traditions.

**Key Words:** Bashkir Folklore, Cosmogony, Expedition, Myth, Rite, Sun, Moon, Stars.

Һуңғы йылдарҙа уҙғарылған экспедицияларҙа йыйылған халыҡ ижады ынйылары араһында иң йыш осраған Ҡояш, Ай, йондоҙҙар тураһында мәғлүмәттәр. Был соляр образдар хаҡында төрлө мәғлүмәттәрҙең таралыуына беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙҙың донъяға булған ҡараштары сәбәпселер. Борон-борондан кешеләрҙе әйләнә-тирәләге тереклектең ҡайҙан һәм ни рәүешле килеп сығыуы тураһында һорауҙар ҡыҙыҡһындырған. Күк йөҙө, донъя бары тик күҙ күреме менән генә ҡабул ителгән, ә аңлата алмаған урындар, реаль ысынбарлыҡ кешенең фантазияһы, мифтар менән тулыландырылып, йәнләндерелгән. Мәҡәләнең төп маҡсаты, хәҙерге көндә халыҡ хәтерендә һаҡланып ҡалған мәғлүмәттәрҙе яҡтыртыу. Әлбиттә, материалдарҙы барлағанда шуныһы күҙгә ташлана, был образдар хаҡында бай йөкмәткеле легендалар, риүәйәттәр, һамаҡтар юҡ дәрәжәһендә, элегерәк яҙып алынған мәғлүмәттәрҙең хәҙерге көндә бары тик ҡайһы бер ярсыҡтары ғына һаҡланып ҡалған.

Бар йыһанға яҡтылыҡ, йәшәү бүләк итеүсе Ҡояш кешелекте бар ғүмере буйына оҙатып килә һәм ул бар төрки халыҡтар ижадында ла ныҡлы урын алған боронғо мифологик образ. Кешелек борон-борондан ерҙәге эшләнелгән бөтә эштәрҙең барышына, эшмәкәрлегенә Ҡояштың туранан-тура булышлыҡ итеүен билдәләгән. Ҡояш культы, бигерәк тә уның ҡалҡыуына бәйле ышаныуҙар, им-томдар борон-борондан күҙәтелеп килә, һәм экспедиция материалдары күрһәтеүенсә, бөгөнгө көндә лә тотороҡло һаҡлана. Борон кеше Ҡояш ҡалҡыу менән ерҙә бар тәбиғәттең уянғанын ныҡлы белгән. Оло быуын кешеләре һәр ваҡыт иртән Ҡояшты көтөп алған, «Хәйерле Ҡояш булһын!», тип сәләмләп:

Яҡты Ҡояшты күрҙек,
Көндәребеҙ иҫән үтһен!
Көн дә тыуҙы,

Эш тә тыуҙы[1], -

тип, яңы эштәр башлап:

Бисмилла-рахман-рахим!

Икендегә[*] етмәһен,

Ике һуҡыр күрмәһен[2], -

тигән һүҙҙәр менән Ҡояш байыуғанға тиклем эштәрен тамамлар булғандар.

Иртән сәғәт ете менән һигеҙ араһында, ҡулдарҙы өҫкә күтәреп, Ҡояшҡа ҡарап:

Эй, Хоҙайым!

Донъяларыбыҙҙы яҡтыртыусы, Илаһым!

Беҙгә аяҙ көндәр бир,

Беҙҙе ас итмә, яланғас итмә!-

тип, үҙ теләктәрендә теләһәң дә, ҡабул булыр, ти, халыҡ[3]. Яңауыл районы Киҫәк-Ҡайын ауылында йәшәүсе Ниғмәтйәнова Фәриҙә Ниғмәт ҡыҙы (1918 й.) иһә иртән, ҡояш ҡалҡҡансы уҡ, ишекте асып ҡуйырға кәрәк. Хоҙайҙың ризыҡ өләшкән ваҡыты ул, тип һөйләгән ине[4].

Ә инде Ҡояш байыу менән бар тәбиғәт, бар тереклек туҡтап ҡала, тип фаразлағандар. Хатта шаулап аҡҡан йылғалар үҙ ағымдарын кәметер, был мәлдә һыу ҡан төҫөнә инер. Был төҫтө бары тик Хоҙай ғына күрә икән. Һыу үҙенең пәрҙәһен ябыр, уны борсорға ярамай, ти, ололар. Һыу алыр булһаң, унан рөхсәт һорап:

Атлы ҡунаҡ килде,

Һыу алырға рөхсәт ит[5], -

тип мөрәжәғәт итәләр.

Көн болотлап торғанда иһә:

Ҡояшҡайым, сыҡ-сыҡ!

Тәтәй ҡашыҡ бирермен,

Майлы бутҡа бирермен!

Тәтәй ҡашыҡ баҙарҙа,

Майлы бутҡа ҡаҙанда![6] –

---

[1] Суфияров Шәрәфетдин Суфияр улынан(1926 й., 3 класс белемле, 4 бала әсәһе, Асҡын районы Кубияз ауылы) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

[*] Иkende – ҡояш байыуғанға тиклемге ваҡыт.

[2] Юлдыбаева Тәзкирә Фәтҡотдин ҡыҙынан (1939 й., 7 класс белемле, 5 бала әсәһе, Ғафури районы Сәйетбаба ауылы) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

[3] Сабитова Йәсимә Мортаза ҡыҙынан (1929 й., 10 класс белемле, 6 бала әсәһе, Асҡын районы Көнгәк ауылы) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

[4] Ниғмәтйәнова Фәриҙә Ниғмәт ҡыҙынан (1918 й., 4 класс белемле, колхозда эшләгән, Яңауыл районы Киҫәк-Ҡайын ауылы) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

[5] Сөләймәнова Сәбихә Ғиниәт ҡыҙынан (1931 й., Йылайыр районы Сәләх ауылы) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

[6] Яппарова Шәрифә Вәлиәхмәт ҡыҙынан (1934 й., 5 класс белемле, 5 бала әсәһе, Яңауыл районы Эткенә ауылы) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

тип өндәшәләр. Ә Ҡояш сағыу итеп ҡыҙҙырғанда:

Бисмиллаһир-рахмани-рахим!

Собханалла зөлғәрселғәзим,

Собханалла зөл мәлики-ҡәҙим,

Собханалла зол фазыл – Хәким,

Хәким фәрештәгә тапшырабыҙ, -

тиҙәр, йәиһә:

Ҡыйыу балҡый сән-сән,

Балҡый иман Аллаһы-самат[7], –

тип әйтеп ҡуялар.

Ҡайһы ваҡытта "Ҡояш сыҡҡан" тигәнде ишетеү менән ололар тиҙ генә туҡтатып, "Ҡояш сыҡҡан", тимәйҙәр, ә "Ҡояш ҡалҡты", тип әйтергә кәрәк, юғиһә, Ҡояш рәнйешен алырһың, "үҙеңдең күҙен сыҡһын", тип теләр, тип, иҫкәртәләр. Хатта ошо тыйыуҙа ла борон кешеләрҙең Ҡояшты ни тиклем ололауын күрергә була.

Халыҡ хәтерендә Ҡояштың элекке торошо хаҡында мәғлүмәттәр ҙә һаҡланып ҡалған. Мәҫәлән, Свердловск өлкәһендә уҙғарылған экспедиция мәлендә был хаҡта шундай легенда яҙып алырға тура килде. "Борон Ҡояш ергә бик яҡын торған. Шул ваҡытта Хоҙай Тәғәлә беҙгә ризыҡ биреп, аҙнаһына бер генә тапҡыр ашарға бойорған. Әммә кешенең нәфсеһе туймаған, артабан Хоҙай аҙнаһына ике тапҡыр ашарға ҡушҡан, нәфсе тағы туймаған, Хоҙай көнөнә өс тапҡыр ашарға ҡушҡан, әлеге нәфсе тағы ла туймаған. Хоҙай аптырағандан кешегә «Нәфсең тулғансы тығыл», тип ирегенә ҡуйған. Бына хәҙер бөтә нимә ирегенә бит. Хоҙай Тәғәлә ана шуға беҙ тығынған һайын Ҡояшты күккә күтәреп бара. Ҡапыл ныҡ күтәрелә башлағас, эттәр-бесәйҙәр ҡысҡырышып ҡына туҡтатҡандар уны, беҙ уларҙың ризығын ашап йәшәйбеҙ. Хоҙай Тәғәлә шуға уларҙы беҙгә ҡарарға, туйындырырға ҡуша"[8].

Халыҡ телендә Ҡояшҡа бәйле һынамыштар, тыйыуҙар, күҙәтеүҙәр ҙә бихисап. Уларҙы бер нисә төргә бүлеп ҡарап булыр ине, мәҫәлән, тәбиғәткә бәйлеләре: әгәр ҡояш ҡып-ҡыҙыл булып байыһа, һуғыш сығыр[9]; Ҡояш ҡыҙарып сыҡһа, иртән ямғыр яуа, ҡышын көн боҙола, ҡар-буран яуа[10]; кешегә ҡағылышлылары: Ҡояш байығас, йыуынты һыуҙы түкһәң, ен-шайтан ҡағылыр. Түкһәң, "бисмилла" әйтергә кәрәк, юғиһә, мәйеттәр килеп эҙләнеп йөрөр, ти; Ҡояш байығас, кешегә әйбер бирергә ярамай, ҡәҙере китер[11];

---

[7] Йомағолова Ҡарлуғастан (1921 й., белемһеҙ, 5 бала әсәһе, колхозда эшләгән, Свердловск өлкәһе Түбәнге Һырға районы Араҡай ауылы) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

[8] Вәлиева Рәшиҙә Муллаян ҡыҙынан (1940 й., Свердловск өлкәһе Түбәнге Һырға районы Шөкүр ауылы, уҡытыусы) Г.В.Юлдыбаева яҙып алған.

[9] Хәтбутдинова Сәүиә Тимерхан ҡыҙынан (1928 й., 4 класс белемле, 6 бала әсәһе, Борай районы Туҡран ауылы)

[10] Хакова Бибихая Минәзитдин ҡыҙынан (1929 й., 6 класс белемле, 4 бала әсәһе, колхозда эшләгән, Яңауыл районы Мәсәғүт ауылы) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

[11] Фаршатова Мөхтәрәмә Вәлиәхмәт ҡыҙынан (Тәтешле районы Шулган ауылы, 5 бала әсәһе) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

аҙбарға Ҡояш батҡанда, ҡояш ҡалҡҡанда керергә ярамай, ен-шайтан ҡағылыр[12]; Ҡояш ҡалҡҡанда, эңер мәлендә йоҡларға ярамай, фәрештәләр бәхет өләшкән ваҡыт[13].

Башҡорттарҙа, Ҡояш менән бер рәттән, Айға бәйле ышаныуҙар, тыйыуҙар ҙа йәшәп килә. Бөтә донъя халыҡтар культураһында Айға элек-электән үҙенсәлекле ҡараш һаҡлана. Ҡояш менән Ай төрки халыҡтар ижадында йә ағалы-һеңлеле, йәиһә игеҙәктәр булып күҙалланалар һәм бер-береһенә ҡапма-ҡаршы көрәшеүсе, ҡайһы саҡта бер-береһенең артынан ҡыуып йөрөүсе дуалистик парҙы барлыҡҡа килтерәләр. Башҡорт фольклорында ла бындай үҙенсәлек һаҡлана. Башҡортостандың Әлшәй районында ошондай мәғлүмәт яҙып алынды: “Ай элек ныҡ яҡты, ҡыҙыу булған, ти. Ул гел генә маҡтанып, һауаланып:

– Мин һинән дә яҡтыраҡ, нурлыраҡ, – тип, Ҡояшты мыҫҡыл иткән.

Аллаһы Тәғәлә уның был ҡыланыштарына түҙә алмаған, уның нурын, йылыһын кәметкән икән. Ай шул көндән башлап Ҡояшҡа асыуланып, бер тулып, бер кәмеп көн итә икән”[14].

Яңы тыуған Айҙы күргәндә борон да, хәҙер ҙә оло кешеләр:

Ай күрҙем аман менән,

Ауыҙым тулы иман менән.

Ҡуйыным тулы Ҡөръән менән,

Итәгем тулы балам менән,

Кәртәм тулы малым менән,

Ошо айҙа вафат булһам,

Үткәр, Хоҙайым, иман менән, –

тип, бар ғаиләһенә, мал-тыуарына теләк теләгән. Был һүҙҙәрҙе Башҡортостандың күпселек райондарында ишетергә була.

Тулған Айҙың магик көскә эйә булыуын раҫлаусы мәғлүмәттәр ҙә йәшәй халыҡ күңелендә. Мәҫәлән, тулған Айҙы иһә тәҙрә аша ҡарап торорға ярамай, ай кеүек моңһоу, яңғыҙ булырһың, тип тә юрайҙар[15]. Ҡайһы бер эштәр ай торошона ҡарап башҡарыла: баланың тәү сәсен, тырнаҡтарын алыу, хатта ҡыҙ биреү, ҡыҙ алыу ҙа был иҫәпкә алына. Ай бөтөүгә барғанда мөһим һаналған эш башламайҙар, һ.б. Был тыйыуҙарҙы, һынамыштарҙы экспедиция мәлендә Башҡортостандың барлыҡ райондарында ла тиерлек ишетергә тура килә.

Ә инде халыҡ дауаларына килгәндә, тәнгә сыҡҡан сөйәлде бөтөрөү өсөн, уны тулған Айға күрһәтергә кәрәк икән, һәм шул ваҡытта:

Ай, Ай, ҡара әле,

Ҡайҙа һинең тәтәйең,

---

[12] Дилмөхәмәтова Сәтиға Ғәфиулла ҡыҙынан (1926 й., Тәтешле районы Курдем ауылы) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

[13] Мөхәммәтйәрова Фәниә Әхмәтзыя ҡыҙынан (1939 й., 7 класс белемле, 4 бала әсәһе, колхозда эшләгән, Яңауыл районы Иҫке Ҡоҙаш ауылы) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

[14] Әхмәтшина Зәйнәп Миңлеәхмәт ҡыҙынан (1924 й., белемһеҙ, колхозда эшләгән, Әлшәй районы Алдар ауылы) Г.В.Юлдыбаева яҙып алған.

[15] Ғәләүетдинова Зәкирә Шәмси ҡыҙынан (1931 й., 4 класс белемле, 6 бала әсәһе, Свердловск өлкәһе Түбәнге Һырға районы Уфа-Шигере ауылы) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

Бына минең тәтәйем[16], -

тип һамаҡлаһаң, сөйәлдәр бөтә икән.

Свердловск өлкәһе Сәлимгәрәева Рәшиҙә Нурғаян ҡыҙы (1926 й.): «Ай тыуған ваҡытта, йоҡлар алдынан матур төштәр күрергә юрап, баш аҫтына япраҡмы, ташмы табып һалабыҙ. Шулай итһәң, төндә күргән төш ҡабул булыр», тип тә һөйләгәйне.

Айҙағы таптарҙы аңлатыусы, унда йәшәүсе ҡыҙ мотивы киң таралған мотив, һәм уларға ярашлы, Ай егет рәүешендә лә, ҡатын ҡыҙ образында ла күҙаллана. Мәҫәлән, «Айҙағы ҡыҙ» легендаһында Ай егет образында һынлана. Айҙың матурлығына һоҡланып, ҡыҙ уға: «Әгәр ҙә минең Ай һымаҡ матур ирем булһа, мин уға ошо батыр шикелле мөһабәт кәүҙәле ул табып бирер инем», – тигән икән, Ай-егет ҡыҙҙың һүҙҙәрен ишеткән дә, уны үҙенә ҡатын итеп алған. Шунан бирле, Ай битендә тора, ти, ул көйәнтәле ҡыҙ. Ә икенсе версия буйынса, Ай ҡатын-ҡыҙ образында һынлана, үгәй инәһенең битәрләүенән ялыҡҡан Зөһрә ҡыҙ айға: «Ай инәкәйем, алһана, Ай инәкәйем, алһана», тип һамаҡлай, Ай, үҙ сиратында, ҡыҙҙы ҡыҙғанып үҙенә ала. Ер ҡыҙының Айға күтәрелеүе тураһындағы легендалар башҡорт халҡында ғына түгел, татарҙарҙа[17], Урал-Волга буйы төбәгендә йәшәүсе башҡа халыҡтарҙа ла осрай.

Күк биҙәге йондоҙҙар хаҡында ла халыҡ хәтерендә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр һаҡлана. Мәҫәлән, Етегән йондоҙо тураһында күберәк һөйләй оло быуын кешеләре. Ете йондоҙсоҡтан торған был йондоҙлоҡто төньяҡ, төньяҡ-көнсығыш, ҡайһы бер башҡа төбәктәрҙә Сүмес, Һүмес, Сирпәк, Сүмесбаш йондоҙ тип, сүмескә оҡшатып та йөрөтәләр. Фонетик варианттары ла бар: Житегән, Еҙәгән, Еҙегән. Фарсы телендә был йондоҙлоҡто, айыуға оҡшатып Оло (Ҙур) айыу, Кесе (Бәләкәй) айыу тип әйтәләр[18]. Мәҫәлән, «Етегән йондоҙҙо ете тапҡыр әйләндереп әйтһәң һауап була», тигән һүҙҙәрҙе бер тынала ете тапҡыр әйтһәң, һауап булыр, теләгән теләктәрең ҡабул булыр, ти, Һамар өлкәһе Ырғыҙ ауылында йәшәүсе Насырова Разия Ғәббәс ҡыҙы (1935 й.).

Архивта һаҡланған экспедицион яҙмаларҙа Етегән йондоҙоноң барлыҡҡа килеүен аңлатыусы күп легендалар бар, беҙҙең көндәргә уларҙың ярсыҡтары ғына килеп еткән. Сулпан, Тимер ҡаҙыҡ, Зөһрә, Таң йондоҙҙары тураһында әҙме-күпме мәғлүмәттәр ҙә табыла эш мәлендә.

Йондоҙ атылыуҙың һөҙөмтәһен аңлатыусы ырым-ышаныуҙар ҙа йәшәп килә, мәҫәлән, йондоҙ атылһа, берәү үлде, берәү тыуҙы, тип юрайҙар, ҡайһы бер яҡтарҙа күктә йондоҙ атылыуҙы күрһәң, теләк теләп ҡалырға кәрәк, теләгең ҡабул була, тип тә әйтәләр, ҡайһы берҙәре иһә йондоҙ атылған мәлдә «минең йондоҙом күктә» тип, әйтеп ҡалырға ашыға, йәнәһе лә, күктә һәр кемдең йондоҙо бар, ул кешенең йәне, тип ышаналар, ул атылмайса, күктә генә ҡалырға тейеш, ә инде һинең йондоҙоң атылһа, бәлә-ҡазаға, тип юрайҙар. Былдай мәғлүмәттәрҙе хәҙерге көндә Башҡортостан райондарында, күрше Свердловск, Һамар, Һарытау өлкәләрендә йәшәүсе башҡорттарҙан да ишетергә тура килә.

Әлбиттә, соляр персонаждар хаҡында яҙғанда башҡа төрки халыҡтар фольклорында ла бихисап параллельдар табыла, әммә бер мәҡәлә лә генә уларҙың барыһын да яҡтыртып булмай, был артабанғы тикшеренеүҙәр маҡсаты булып ҡала.

---

16 Юлдыбаева Тәзкирә Фәткотдин ҡыҙынан (1939 й., 7 класс белемле, 5 бала әсәһе, Ғафури районы Сәйетбаба ауылы) Г. В. Юлдыбаева яҙып алған.

17 Татар халыҡ риваятьләре һәм легендалары /Төз. С. М. Гыйләҗетдинов. – Казан: Раннур, 2000. – 236-237 б.

18 Баязитова А., Шәкүр Р. З. Башҡорттарҙа һәм бүтән төрки халыктарында космонимия/ А. Баязитова, Р. З. Шәкүр// Ватандаш. – 2003. – № 1. – 77-83-сө б.

**Әҙәбиәт**

АМИНЕВ, З. Г., (2005). Космогонические воззрения древних башкир/З. Г. Аминев. – Уфа: Башлингвоцентр.

БАЯЗИТОВА А., ШӘКҮР Р. З. (2003) Башҡорттарҙа һәм бүтән төрки халыҡтарында космонимия / А. Баязитова, Р. З. Шәкүр// Ватандаш. – № 1. – 77-83-сө б.

ГАЛИН, С. А., (1999). Тел асҡысы халыҡта. Башҡорт фольклорының аңлатмалы һүҙлеге/ С. А. Галин. – Өфө: Китап.– 2-се баҫма.

ӘХМӘТЙӘНОВ, К. Ә., (2003). Әҙәбиәт теорияһы/К. Ә. Әхмәтйәнов. – Өфө: Китап.– 3 баҫма.

КИНЬЯБУЗОВА, А., ХАЗИЕВ, В., (2003). Космос и хаос в башкирской мифологии/ А. Киньябузова, В. Хазиев//Ватандаш. – 9.– С. 182.

САГАЛАЕВ, А. М., (1991). Урало-алтайская мифология/А. М. Сагалаев.

Татар халыҡ риваятьләре һәм легендалары (2000) /Төз. С. М. Гыйләжетдинов. – Казан: Раннур. – 236-237 б.

ХӘКИМОВА, В. Ш., (1994). Башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрендә сағыштырыуҙар / В. Ш. Хәкимова // Туған тел һәм әҙәбиәт: конф. тезис. – Өфө.

ХИСАМИТДИНОВА, Ф. Ғ., (2002). Башҡорт мифологияһы. Белешмә-һүҙлек/ Ф. Ғ. Хисамитдинова. – Өфө: Ғилем.

ХӨСӘЙЕНОВ, Ғ. Б., (2003). Башҡорт халҡының рухи донъяһы/Ғ. Б. Хөсәйенов. – Өфө: Китап.